ыны берене. Ул бөгөн ата-
данлыҡлы игенсе. Социа-
Хеҙмәт Геройы Риза Яхин-
әге һәм маҡтаулы эшен
ы дауам итә, юғары хеҙмәт
честәренә өлгәшә. 2015 йыл
тары буйынса Рәшит Риза
йонда "Йыл фермеры" исе-
йыҡ булғайны.
ан йылда ла фермер хужа-
ҡшы производство күрһәт-
енә ирешә: 450 гектарҙағы
культураларынан тос уңыш
п алды, матди-техник потен-
а нығытты. Хужалыҡ эштә-
оштороуҙа Рәшит Яхин ҡа-
Миңзифа Мөрит ҡыҙы һәм
Иршаттың ныҡлы ярҙамын
эшләй.



рмер хужалығы комбайнсыһы Мөбәрәк Әминов (*һүрәттә*) үткән йылғы
ыйыу эштәре йомғаҡтары буйынса район хеҙмәт ярышында еңеп сыҡты
өнәре буйынса иң яҡшыһы" исеменә лайыҡ булды.

Д. Фадеев фотоһы.

ӘШЛЕ ЭШ ТАРҠАЛМАҪ

Мәсьәләләрҙе
бергәләп хәл итергә

**айон халыҡ ижады үҙәгендә
ципаль район хакимиәте
лығы И.Х. Ситдыҡов
елегендә үткән кәңәшмәлә
ципаль милек менән идара
, ошо тәңгәлдә ҡануниәткә
рештәр индерелеүе, район
кетын тулыландырыу, дини
әләләр көн үҙәгенә
рылды. Һөйләшеүҙә ауыл
мәләре башлыҡтары, эштәр
асылары, ер эше белгестәре,
ойошмалар вәкилдәре
нашты.**

– Һуңғы йылдарҙа беҙ ике төп
конфессия – мосолмандар һәм
тиандар менән яҡшы мөнәсәбәт
ырыуға өлгәштек, – тине Илшат
т улы, – артабан да эште ошо
кта дауам итеү мөһим. Сөнки
ойошмалар йәшәйешебеҙҙә
роль уйнай, үҙ-ара татыулыҡҡа
й, райондағы социаль, рухи
әләләрҙе хәл итеүгә үҙ өлөшөн
рә.
Баймаҡ районының имам-мөхтә-
Хәмзә хәҙрәт Хафизов үҙенең сы-
ында үткән йылда башҡарылған
рргә йомғаҡ яһаны, төрлө экстре-
тик ағымдарға, сектанттарға ҡаршы
м эш алып барырға саҡырҙы.

Район хакимиәтенең юрист-консульты Р.З. Хисаметдинова, юридик бүлек начальнигы З.Б. Бүләкова, милек менән идара итеү комитеты рәйесе Р.В. Рәхимғолов муниципаль милек менән идара итеү һәм файҙаланыу, хужаһыҙ милеккә милексе-лек хоҡуғы алғанда ҡануниәттәге үҙгәрештәр, муниципаль милек менән файҙаланыуҙан килемде тултырыу һәм шуның нигеҙендә район һәм ауыл биләмәләре бюджетын тулыландырыу мәсьәләләре тураһында һөйләне.

Хакимиәттең өлкән техник-программаһыһы И.И. Сиражетдинов электрон документтар өлкәһендәге яңылыҡтар һәм үҙенсәлектәр менән таныштырҙы, һорауҙарға яуап бирҙе.

"Берҙәм Рәсәй" партияһының урындағы бүлексәһе етәксеһе Х.Х. Әминев белдереүенсә, ойошма быйыл да "Изгелек кәрзине", "Аныҡ эштәр" һәм башҡа проекттарҙы тормошҡа ашырыу эшен дауам итәсәк.

Район Советы секретары Р.З. Ишбулатов һәм район хакимиәте башлығы И.Х. Ситдыҡов кәңәшмәнең эшенә йомғаҡ яһаны. Төп фекер шундай: урындарҙағы власть органдары үҙҙәренең эшен партия активы, имам-хатиптар, йәмәғәт һәм ветерандар ойошмалары ярҙамында әүҙемләштерергә тейеш. Быны беҙҙән заман талап итә.

Азамат Мөхәмәтшин.

Ҡала халҡы иғтибарына!

**Баймаҡ ҡалаһы, Чапаев урамындағы 3-сө, Р. Люксембург урамындағы
се, 6-сы, 8-се авария хәлендәге торлаҡ йорттарҙа йәшәүселәрҙе күсереү
бәпле, 30 ғинуарҙа йорттарға электр һәм газ биреү туҡтатыла.**

Ҡала биләмәһе хакимиәте.

түләү ала башланы

Башҡортостан Республикаһы буйынса Пенсия фонды бүлексәләре пенсионерҙарға тәғәйенләнгән 5 мең һум күләмендәге аҡсалата түләүҙе тапшырыу өсөн был йүнәлештә шөғөлләнгән ойошмаларға етерлек күләмдә финанс йүнәлтте. Ошо маҡсатта барлығы 5 млрд 805 млн һум аҡса күсерелде, тип хәбәр итте Рәсәй Пенсия фонды идаралығы ағзаһы, Башҡортостан Республикаһы буйынса бүлексә идараһыһы Фоат Хантимеров. Кредит һәм башҡа ойошмалар аша пенсия алыусыларға түләү өсөн 3 млрд 295 млн һум аҡса күсерелгән.

5 мең һумлыҡ түләү 13 ғинуарҙан таратыла башланы. Тап ошо көндән пенсия алыусыларға ул пенсияға ҡушып бирелә. Ә инде кемдәр пенсияһын 3-нән 12-һенә тиклем алып өлгөргән, уларға 24-28 ғинуарҙа таратыласаҡ. Декабрҙә алған пенсия квитанцияларында уның аныҡ көндәре бирелгән.

5 мең һумлыҡ түләү тараҡкан саҡта пенсионер өйҙә булмай ҡалһа, 28 ғинуарға тиклем уны почта бүлексәһенә барып алырға мөмкин. Йәки февраль айындағы пенсия менән ҡушып биреләсәк. Түләүҙе пенсионер үҙе ала алмаһа, уның ғаиләһендәге икенсе бер кеше, йәки мираҫсыһы алырға хоҡуҡлы. Шундай уҡ талап пенсионерҙың был түләүҙе ала алмай, вафат булған осрағында ла ҡаралған.

16 ғинуарға ҡарата 5 мең һум түләү республиканың 740 мең гражданына бирелгән.

**Рәсәй Пенсия
фондының БР буйынса
бүлексәһенең
матбуғат хеҙмәте.**

Редакциянан: Ошонда уҡ иҫкәртеп үтергә кәрәк, был тәңгәлдә лә мутлашыусылар "йоҡламай", мәкер тоҙағын ҡора. Улар үҙҙәрен Пенсия фонды идаралығы белгестәре тип танытып, пенсионерҙар тураһында тулы мәғлүмәт туплай. 5 мең һум түләү банк иҫәбенә күсереләсәк, тигән һылтау менән банк карталары, иҫәп-хисап тураһындағы мәғлүмәттәрҙе алалар. Һуңынан иһә уларҙың иҫәбендәге бөтә һаҡлыҡ аҡсаһын урлайҙар. Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә ошоға бәйле зыян күреүселәр бар ҙа инде.

5 мең һумлыҡ түләүҙе алыу өсөн бер ниндәй ҙә ғариза яҙыу талап ителмәй. Пенсия фонды идаралығы белгестәре фатир, йорттар буйлап йөрөмәй һәм банк карталары тураһындағы мәғлүмәттәр тупламай, шикле һылтанмалар менән электрон хаттар ебәрмәй. Әгәр ҙә кемдер һеҙгә ошо юҫыҡта мөрәжәғәт итә икән, полицияға шылтыратығыҙ.

АУЫЛ ТОРМОШО

Байыштар юлын тапҡан – түләүле концерт асҡан

Байыш ауылының халҡы үтә дәртле, тынғыһыҙ булһа ла, ауыл клубы бик йәлләнес хәлдә: баҫһаң – иҙәне һыныр, ҡысҡырып көлһәң – түбәһе емерелер кеүек. Шуға күрә уға капиталь ремонт яһатыу өсөн байыштар "Урындағы инициативаларҙы яҡлау" программаһына ҡушылмаҡсы була. Әммә унда әләгеүҙең дә үҙ этнәкәһе бар: 650 мең һум аҡса алыр өсөн 18 меңдән 60 мең һумға тиклем халыҡ үҙе аҡса йыйырға тейеш. Дәртле халыҡ күп уйлап тормаған, ауыл биләмәһе башлығы Фәйзи Рәхмәтуллин әйтеүенсә, ауылдың 4 округы ең һыҙғанып концерт әҙерләгән. Түләүле концерт һәр аҙнаның шәмбеһендә ауылдаштарына тәҡдим ителә. Шулай итеп, әлеге көндә 2 округ концерт ҡуйырға өлгөргән. Тағы 2 округтың сығыштарынан һуң уларҙың әҙме-күпме ҡушымтаһы йыйыласаҡ. Байыш ауылынан сыҡҡан билдәле сәнғәт, мәҙәниәт һәм башҡа эшмәкәрҙәр ҙә ауылдарына бағыусы ярҙамы күрһәтһә, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине. Күмәкләгән – яу ҡайтарған, тиҙәр бит.

А. Ишембаева.